# АННОТАЦИЯ
## к рабочим программа по башкирскому языку как государственному языку

1 – 11 класс

Уҡыу предметының маҡсаттары һәм бурыстары

Рус һәм башҡа мәктәптәптәрҙә телде белмәгән балаларға башҡорт телен өйрәтеүҙең байтаҡ үҙенсәлектәре бар. Уларҙың иң мөһимдәре:

1. Балаларҙы һөйләшергә һәм аңларға өйрәтеү үҙәк бурыс.
2. Был дәрестәрҙә балаларҙы башҡортса һөйләшергә, уҡырға, элементар яҙырға өйрәтеү бергә алып барыла.Тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция).
3. Башҡорт теле мотлаҡ практик рәүештә өйрәнелә. Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

- уҡыусыларҙа башҡорт телендә һөйләгәнде, уҡығанды, радиотапшырыуҙар тыңлағанды аңлау күнекмәләре булдырыу (аудирование).
- аралашыуҙа кәрәк була торған типик һөйләмдәрҙе күсереп, үҙ фекерҙәрен билдәле кимәлдә үҙ аллы яҙыу күнекмәләрен булдырыу;
- башҡорт телен өйҙә, йәмәғәт тормошонда, хеҙмәт процесында практик файҙаланырға өйрәтеү;
- башҡорт телен практик өйрәнеүгә бәйләп, балаларҙы башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, милли йолалары, башҡорт халҡының күренекле шәхестәре, уларҙың эшмәкәрлеге, ижады һәм башҡалар менән таныштырыу, балаларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына, үҙҙәре йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү. Текстағы яңы һүҙҙәр, фразаларҙы аңлатыу, һүҙлек эше үткәреү мотлаҡ;
- әҫәрҙе өләшләп, һайлап, ролдәргә бүлеп, сылбыр буйынса уҡыу, тексты магнитофон яҙмаһынан тыңлау, йөкмәтке буйынса һорауҙарға яуап биреү кеүек эштәр башҡарғанда, һүҙлек эше иғтибар үҙәгендә тора;
- түбән кластарҙа алған белемдәр тулыландырыла. Темалар буйынса яҙыусылар, шағирҙар ижады менән таныштырыу, яңы текстар уҡыу, диалог һәм монолог ярҙамында бәйләнешле һөйләм төҙөү дауам итә;
- туған тел, белем, уҡытыусы, мәктәп һәм йыл миҙгелдәре тураһында, батырлыҡ тураһында һөйләшеү күберәк урын ала;
- бәйләнешле текст төҙөү, бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү күнегеүҙәре башҡарыла.

Шәхси сифаттарҙы үҫтереү һәм уҡыу эш төрҙәрен үҙләштереү.

1. Үҙ аллы эш итеү, белем алыу процесына етди һәм яуаплы ҡарау;
2. Атай-әсәйгә, тиҫтерҙәренә, уҡытыусыларға, яҡындарына, мәктәп хеҙмәткәрҙәренә иғтибарлы һәм ихтирамлы булыу;
3. Мәктәп йыһаздарына, уҡыу әсбаптарына ҡарата һаҡсыл булыу;
4. Тыуған илде яратыу, ерҙе, телде һаҡлау;
5. Һаулыҡты нығытыу;
6. Ҡунаҡта, кинола йәки экскурсия һәм башҡа йәмәғәт урындарында әҙәпле булыу, файҙалы ял итеү;
7. Кеше менән аралашыу этикетын үҙләштереү;
8. Үҙ аллы белем алыу, мәғлүмәт йыйыу һәм уларҙы ҡуллана белеү;
9. Дәрес барышында уҡытыусы менән берлектә эшләү; дәрескә маҡсат ҡуйыу һәм уны дәрес һуҙымында күҙ уңында тота белеү һәм тормошҡа ашырыу, эште дөрөҫ планлаштырыу, эҙләнеү эше алып барыу;
10. Эҙләнеү эше һөҙөмтәләре буйынса презентация эшләү;

11. Тиҫтерҙәре һәм оло кешеләр менән итәғәтле һөйләшеү, кеше менән мөнәсәбәт ҡороу оҫталығын үҙләштереү. Эшләгән эштәрен дөрөҫ баһалау һәм кәрәк саҡта төҙәтмәләр индереү.

Эш прогаммаһы 68 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 2 сәғәт) 5 – 11 кластар өсөн

Эш прогаммаһы 34 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 1 сәғәт) 1 - 4 кластар өсөн